# Аҡмулла яҡтылыҡ йырсыһы

Давлетшина Лейсян,
9б класс.



# МИФТАХЕТД
# ИН
# АҠМУЛЛА

**Мифтахетдин Аҡмулла Салауаттан һуң үҙенең ижадын ер тормошон күрһәтеүгә, фани донъя кешеһенең теләген, тойғоһон, уның аҡыл үҫешен һәм алға ынтылыштарын сағылдырыуға биргән иң ҙур шағир булды.**

*Әхнәф Харисов*

**Аҡмулла – халыҡтар дуҫлығы йырсыһы. Унын мираҫы – халыҡтар күңелен тоташтырып ятыр бер моңло еп.**

*Ҡарағалпаҡ шағиры Жолдас Сәйетназаров*

**Мифтахетдин Камалетдин улы Камалетдинов** (псев. – Аҡмулла) 1831 йылдың 14 декабрендә (яңы стиль менән 26 ) Ырымбур губернаһы Бәләбәй өйәҙе (хәҙер Башҡортостандың Миәкә районы) Туҡһанбай ауылында мулла ғаиләһендә донъяға килгән.



**Мифтахетдин Аҡмулла тыуған Туҡһанбай ауылының хәҙерге күренеше**



Мифтахетдин Аҡмулла тыуған
Туҡһанбай ауылы

 

*Аҡмулланың сәйәхәт итеп йөрөгән арбаһы, үҙе алып*



Миәс ҡалаһынан алыҫ түгел
Аҡмулла ҡәберенә элек
ҡуйылған иҫтәлек ташы



Аҡмулланың Миәс ҡалаһы
янындағы ҡәбере. *1981 йыл*










Мифтахетдин Аҡмулланың тыуыуына 150 йыл тулыу айҡанлы нәшер ителгән китаптар. *1981 йыл*

# АҠМУЛЛА

*Кемдең арбаһына ултырһаң,*
*шуның йырын йырларһың.*

*Мәҡәл*

*Сиған арбаһынан төшөп ҡалған*
*Кешеләр бар беҙҙең арала.*
*Эй Аҡмулла! Ниндәй ҡөҙрәт менән*
*Эләккәнмен һинең арбаға.*

*Көмөш кенә түгел, алтын бишек*
*Һинең арбаң миңә, Аҡмулла.*
*Шул арбаңда телем асылғастын,*
*Ултырғастын тамам аҡылға,*
*Төшөп ҡалғанмын юл уртаһында,*
*Күрелер, тип, яҙмыш ҡушҡанын.*
*Үҙ йөрәгең типһен йырҙарыңда –*
*Шағирҙарға, тинең, шул ҡанун.*
*Эй Аҡмулла! Бары һинең һүҙең*
*Ғүмерҙәрем буйы арбаған.*
*Мин халҡыма ғына хаж ҡыламын –*
*Холҡом ҡалған һинең арбаңдан.*

*Быуаттарҙан килер быуаттарға*
*Китеп бараһың һин, Аҡмулла.*
*Ә арбаңдан милләт балалары*
*Төшә бара, төшә хаҡ юлға.*

*Фәкиһә Туғыҙбаева*



Туҡһанбай ауылындағы Аҡмулла музейында башҡорт халҡының XIX быуаттағы көнкүрешен сағылдырған бүлек



Мәскәүҙә Союздар йортонда Мифтахетдин Аҡмулланың тыуыуына 150 йыл тулыуға арналған тантаналы кисә




Мифтахетдин Аҡмулланың тыуыуына 150 йыл тулыу айҡанлы тантанаға саҡырыу билеты. *1981 йыл*



1915 йылда Троицк ҡалаһында сығарылған "Аҡмулла" журналының тышлығы




Мифтахетдин Аҡмулланың 1981 йылда сыҡҡан китабының тышлығы



Мифтахетдин Аҡмулланың татар телендә сыҡҡан шиғырҙар китабы

*Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!*
*Арабыҙҙа наҙандар күп, уҡыу һирәк.*
*Аңғыра айыуҙан Уралдағы ҡурҡҡандай,*
*Эй, туғандар, наҙанлыҡтан ҡурҡыу кәрәк!*

